Башҡортостан Республикаһының муниципаль район Учалы районының Исхаков А.С. исемендәге Уральск ауылы муниципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы урта дөйөм белем биреү мәктәбе

| | | |
|---|---|---|
| “Ҡаралды”<br>МБ етәксеһе<br>М.С. Дәүләтшина_____<br>Протокол №_1_<br>“_28_” __08____ 2017 й. | “Килешелде”<br>Директор урынбаҫары<br>З.Р. Фазлетдинова_____<br>“_31_” __08____ 2017 й. | “Раҫлайым”<br>Мәктәп директоры<br>Л.А.Рәхмәтуллина_____<br>Приказ №_213_<br>“_31_” __08____ 2017 й. |

**5 –9 синыфтары өсөн**
**Башҡорт (дәүләт) теле дәресенән**
**уҡытыу программаһы**

**База кимәле**

**1.Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар**

**5-се синыф.**

1.Уҡытыусы уҡыған йәки һөйләгән, үҙең уҡыған тексты аңлай алыу; 3-6 һөйләмдән торған диалогты аңлау, уны дауам итә белеү;
2. Уҡыған әҫәр, картина, экскурсия, ҡараған диафильм буйынса әңгәмәлә ҡатнашыу;
- предметты, күренеште элементар рәүештә һүрәтләү, уға үҙ мөнәсәбәтеңде булдырыу;
- хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәрҙе, поэтик әҫәрҙәрҙе дөрөҫ интонация менән һөйләү;
- 5 – 7 шиғырҙы яттан тасуири һөйләй белеү;
- тиҙәйткестәрҙе, һынамыштарҙы шыма итеп әйтә белеү.
3.Тексты шыма, аңлы, тасуири уҡыу;
-текстың өлөштәренә, иллюстрацияларына исем биреү;
-текстан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе табыу, мәғәнәләрен аңлатыу, һүҙлектәр менән эш итеү;
-хикәйә, әкиәт, мәҡәл, йомаҡ жанрҙарын айыра белеү.
4. Ҙур булмаған һөйләмдәрҙе күсереп һәм яттан яҙыу;
- текст буйынса һорауҙарға яуап яҙыу;
- 6-10 һөйләмдән торған текстың йөкмәткеһен яҙыу;
-бер телдән икенсе телгә тәржемә итеү;
-өйрәтеү характерындағы күнегеүҙәр эшләү.

**6 – сы синыф.**

1.Уҡытыусы уҡыған йәки һөйләгән, үҙең уҡыған тексты аңлай алыу.
2. Уҡыған әҫәр, картина, экскурсия, ҡараған диафильм буйынса әңгәмәлә ҡатнашыу;
- предметты, күренеште һүрәтләү, уға үҙ мөнәсәбәтеңде булдырыу;
- хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәрҙе, поэтик әҫәрҙәрҙе дөрөҫ интонация менән һөйләү;
- 6 -8 шиғырҙы яттан тасуири һөйләй белеү;
-уҡыған әҫәрҙең йөкмәткеһен һөйләй белеү.
3.Тексты шыма, аңлы, тасуири уҡыу;
-текстың өлөштәренә, иллюстрацияларына исем биреү;
-текстан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе табыу, мәғәнәләрен аңлатыу, һүҙлектәр менән эш итеү;
-хикәйә, әкиәт, шиғыр жанрҙарын айыра белеү.
4. Һөйләмдәрҙе күсереп һәм яттан яҙыу;
- текст буйынса һорауҙарға яуап яҙыу;
- 8-12 һөйләмдән торған текстың йөкмәткеһен яҙыу;
-бер телдән икенсе телгә тәржемә итеү;
- өйрәтеү характерындағы күнегеүҙәр эшләү.

**7-се синыф.**

1. Һүрәтләү, хикәйәләү тибындағы текстарҙы тыңлау һәм аңлап ҡабул итеү;

- текстың планын төҙөү;
- текстың йөкмәткеһен план буйынса һөйләү.

2. Бирелгән тема буйынса диалог төҙөү; диалогты дауам итеү;
- текстағы образлы һүҙҙәрҙе, һүрәтләү – тасуирлау сараларын, мәҡәлдәрҙе табыу, уларҙы телмәрҙә дөрөҫ итеп ҡулланыу;
- тексты икенсе телгә тәржемә итеп һөйләү;
- 8 -10 шиғырҙы яттан тасуири һөйләй белеү.
3. Тексты дөрөҫ, аңлы, тасуири уҡыу;
- тексты мәғәнәле өлөштәргә бүлеү, уларға исем биреү, план төҙөү;
- әҫәрҙән кәрәкле өлөштәрҙе һайлап ала белеү;
- текстан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе табыу, һүҙлектәр менән эш итә белеү.
4. диктанттар яҙыу, өйрәтеү характерындағы күнегеүҙәр эшләү.
;
5. Иптәшенең яҙғанын һәм үҙ яҙмаларын тикшереү, камиллаштыра белеү күнекмәләре.

**8-се синыф.**

- Уҡығанды, һөйләгәнде аңлау, йөкмәтке буйынса һорауҙар, һәм шул һорауҙарға яуап бирә белеү;
- Прозаик текстарҙы дөрөҫ, шыма, аңлы уҡыу белеү;
- Уҡылған тексты өлөштәргә бүлеү,исем биреү, элементар план төҙеү;
- Текстан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе табыу, һүҙлектәрҙе файҙаланыу;
- Башҡортостан тураһында мәғлүмәттәргә эйә булыу;
- Башҡорт халҡының мәҡәлдәре, йомаҡтарын белеү;
- Хәрефтәрҙе һәм һүҙҙәрҙе матур , дөрөҫ яҙа белеү;
- Өйрәтеү диктанты яҙа белеү.
- үҫтереү, яттан һөйләү ҡарала.
- мәғлүмәттәргә эйә булыу;
- Башҡорт халҡының мәҡәлдәре, йомаҡтарын белеү;
- Хәрефтәрҙе һәм һүҙҙәрҙе матур , дөрөҫ яҙа белеү;
- Диктант яҙыу өйрәтеү характерындағы күнегеүҙәр эшләү.

**9-сы синыф.**

1. Ҙур булмаған эпик әҫәрҙәрҙе йәки уларҙың өҙөктәрен һөйләп биреү. Художество әҫәрҙәрҙе инсценировкалау.
2. Уҡытыусы ҡуйған проблемалы һорау ярҙамында геройға характеристика биреү.
   - Тәкдим ителгән әҫәрҙәрҙе тәржемә итә белеү, таныш булмаған һүҙҙәрҙе айыра белеү.

- 12-14 шиғырҙы яттан тасуири һөйләй белеү.
- Эпик, лирик, лироэпик һәм драматик әҫәрҙәрҙе айыра белеү.

3. Һорауҙарға тулы яуап һәм геройҙарға баһалама биреү

- Уҡылған әҫәрҙәргә үҙ мөнәсәбәтеңде белдерә белеү.

4. Телмәр ағышында өндәрҙең үҙгәреүен айыра һәм аңлата белеү.

Диалогтарҙа башҡа кешеләрҙең телмәрендәге орфоэпик хаталарҙы күҙәтәһәм төркөмләй белеү.

- Һүҙлектәр менән файҙалана белеү

Диктант яҙыу өйрәтеү характерындағы күнегеүҙәр эшләү.

**2.Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе.**

**Һаумы, мәктәп!**
Был тема (1 сентябрь – Белем көнө.Мәктәп, уҡыу, белем алыу, тел өйрәнеү) башлыса "Көҙ" темаһы менән бергә үрелеп бара. Бер үк ваҡытта, уҡыусыларҙың йәйге каникулды нисек үткәреүе тураһында әңгәмә үткәреү, фекер алышыуҙар ойоштора. Был темаларға ҡағылышлы һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр иҫкә төшөрөлә, һүҙлек запасын байытыу йәһәтенән яңылары үҙләштерелә.Башҡорт теленең өн-хәрефтәре, ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар. Исем. Исемдәрҙең һан менән үҙгәреше. Һөйләмдә һүҙ тәртибе. Сифат.

**Үҙем тураһында**
Был теманы үҙләштереү барышында уҡыусы үҙе тураһында,үҙенең ғаилә ағзалары, яҡындары тураһында һөйләргә өйрәнергә тейеш. Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Алмаш. Зат алмаштары. Зат алмаштарының килеш менән үҙгәреше. к-г,ҡ-ғ тартынҡыларының сиратлашыуы.

**Йыл миҙгелдәре**
Йыл миҙгелдәре, һәр йыл миҙгеленә хас үҙенсәлектәр менән танышыу. Йыл миҙгелдәрен, һәр миҙгелгә ҡараған ай исемдәрен дөрөҫ әйтә һәм телмәрҙә ҡуллана белеү. Һорау алмаштары.Күрһәтеү алмаштары. Күрһәтеү алмаштарының килеш менән үҙгәреше. Билдәһеҙлек алмаштары. Билдәләү алмаштары.

**Башҡортостанды беләһеңме?**
Уҡыусыларҙы үҙҙәре йәшәгән республиканың үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге менән таныштырыу. Уҡыусы аңына үҙе йәшәгән ерҙең – Башҡортостандың тарихы, уның байлығы, күренекле шәхестәре һ.б. хаҡында бер бөтөн тыуҙырыу һәм ул турала һөйләй белеүҙәренә өлгәшеү. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр. Юҡлыҡ алмаштары.

**Кеше. Тән ағзалары.шәхси гигиена.**
Был тема кешенең тән ағзалары, эске органдарының атамаларын белеү менән бергә шәхси гигиена, көн тәртибе, һаулығы менән берлектә алып барыла. Кешегә һау-сәләмәт булыу өсөн нимә эшләргә кәрәклеге тураһында әңгәмәләр үткәреү, әҫәрҙәр уҡыу. Башҡорт телендә эйәлек төшөнсәһе. Ҡылым.

**Аҙыҡ-түлек.Кейем-һалым. Өй . Магазин.**
Аҙыҡ-түлек, кейем-һалым атамаларын өйрәнеү, һатып алыу этикеты менән таныштырыу, һөйләшергә, аралашырға өйрәтеү. Синоним.
**Яҙ етте.**
Әсәй тураһында шиғыр, хикәйәләр уҡыу. Әсәйҙең донъяла иң ҡаҙерле кеше икәнен, уны ихтирам итергә, яратырға, ҡаҙерләргә кәрәклекте аңлатыу. Был тема ғаилә темаһы менән берлектә бара, шуның өсөн алдағы кластарҙа үтелгән ғаилә темаһы ҡабатлана. Ҡотлау открыткалары яҙырға, ҡотлау һүҙҙәрен әйтә белергә өйрәтеү. Антоним.
Яҙ билдәләрен күрә һәм яҙ миҙгеленең үҙенсәлектәрен әйтә белергә өйрәтеү. 1 май, 9 май байрамдары, дуҫлыҡ тураһында һөйләшеү. Омоним.
Яҙғы эштәр, яҙғы баҡса эштәре,баҫыу эштәре тураһында һөйләшеү. Һан. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.
Башҡорт халҡының, Башҡортостанда йәшәүсе башҡа халыҡтарҙың яҙғы тәбиәғәт менән бәйле ғөрөф-ғәҙәттәре һәм матур йолалары тураһында һүҙ алып барыла. Уҡыусыларға уларҙың кеше тормошондағы әһәмиәте, мәғәнәләрен, уларҙы тергеҙеү кәрәклеген еткереү. Грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

**Календарь-тематик план**
**5 синыф (аҙнаға 1 дәрес)**

| № п/п | тема | сәғәт | Иҫкәрмә | дата план | дата Үткәр. |
|---|---|---|---|---|---|
| **Һаумы, мәктәп!-6** | | | | | |
| 1. | Белем көнө.<br>Башҡорт теленең өн һәм хәрефтәре.<br>Башҡорт алфавиты | 1 | | | |
| 2. | Беҙҙең ғаилә.<br>Исем. | 1 | | | |
| 3. | Исемдәрҙең күплек ялғауы һәм һан менән үҙгәреше. Беләһегеҙме? | 1 | | | |
| 4. | Минең мәктәбем. Һөйләмдәрҙә һүҙҙәр тәртибе. | 1 | | | |
| 5. | Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар. Уҡыусылар. | 1 | | | |
| 6. | Сифат.Ҡурай моңо. | 1 | | | |
| **Үҙем тураһында-8** | | | | | |
| 7. | Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Арыҫлан менән ҡуян. | 1 | | | |
| 8. | Берлектәге исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| 9. | Күплектәге исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| 10. | Зөһрә ҡыҙ.<br>Алмаш. Зат алмаштары. | 1 | | | |
| 11. | Зат алмаштарының килеш менән үҙгәреше. | 1 | | | |
| 12. | Яңы фатир. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| 13. | Ҡыр ҡаҙы. К-г, ҡ-ғ, п-б тартынҡыларының сиратлашыуы. | 1 | | | |
| 14. | Диктант. | 1 | | | |
| **Йыл миҙгелдәре-5** | | | | | |
| 15. | Һорау алмаштар. | 1 | | | |
| 16. | Күрһәтеү алмаштары. Минең бүлмәм. | 1 | | | |
| 17. | Күрһәтеү алмаштарының килеш менән үҙгәреше.Бабай менән һыу инәһе. | 1 | | | |
| 18. | Билдәһеҙлек алмаштары. Билдәләү алмаштары.Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| 19. | Юҡлыҡ алмаштары.<br>Урал | 1 | | | |
| **Башҡортостанды беләһеңме?-3** | | | | | |
| 20. | Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| 21. | Башҡортостанды беләһеңме?<br>Башҡортостан флагы. | 1 | | | |
| 22. | Ватаным – Башҡортостан. Мәҡәлдәр. | 1 | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| **Кеше. Тән ағзалары. Шәхси гигиена.-5** | | | | | |
| 23. | Уңған ҡыҙ.<br>Башҡорт телендә эйәлек төшөнсәһе. | 1 | | | |
| 24. | Ҡылым. Дарыу үләндәре. | 1 | | | |
| 25. | Аҡыллы турғай. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| 26. | Алдаҡсы йондоҙҙар. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| 27. | Ҡылымдарҙың зат һәм һан менән үҙгәреше. Әңгәмәләшә беләһеңме? | 1 | | | |
| **Аҙык-түлек. Кейем-һалым. Магазин. Өй. Баҙар.-2** | | | | | |
| 28. | Синонимдар. Яңы күлдәк. | 1 | | | |
| 29. | Икмәк. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| **Яҙ етте.-5** | | | | | |
| 30. | Антонимдар. Әсә рәхмәте. | 1 | | | |
| 31. | Диктант | 1 | | | |
| 32. | Омонимдар. Ҡоштар ҡасан ҡайта? | 1 | | | |
| 33. | Баҡсасы һәм уның улдары. Һан. Суфия. | 1 | | | |
| 34. | Яҙғы байрамдар. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |

**6 – сы синыф.**

**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе**
**Беҙҙе мәктәп ҡаршылай**
1 сентябрь- Белем көнө. Уҡыусыларҙың хеҙмәт көндәре башланыуы. Белем, тел тураһында мәҡәлдәр өйрәнеү. Грамматика буйынса 1-5-се кластарҙа үткәндәрҙе ҡабатлау.
**Башҡортостан ере буйлап**
Башҡортостан Республикаһы, уның тарихы, күренекле шәхестәре, байлыҡтары менән танышыу. Тема буйынса һөйләү телмәрен үҫтереү, ижади эштәр башҡарыу. Башҡорт телендә эйәлек төшөнсәһе. Сифат. Сифат дәрәжәләре. Синоним. Антоним. Омоним.
**Юл йөрөү ҡағиҙәләре һәм билдәләре**
Хәүефһеҙлек, юл йөрөү ҡағиҙәләре,транспорт төрҙәре тураһында һөйләргә,өйрәтеү,уҡыу материалын тасуири,аңлы уҡыу. Рәүеш.
Рәүеш дәрәжәләре.
**Почта.Телефон.Телеграф**
Почтала үҙеңде тота,телефондан дөрөҫ һөйләшә белеү,хат яҙыу ҡағиҙәләренә өйрәтеү.Ҡылым.Ҡылым һөйкәлештәре.Хәбәр һөй-кәлеше.Хәҙерге заман.
**Дуҫ ҡәҙерен бел**
Ҡылымдың хәбәр һөйкәлеше.Үткән заман. Киләсәк заман.Ысын дуҫлыҡтың ҙур мәғәнәгә эйә булыуы,уны һаҡлай белеү.Дуҫлыҡ хаҡында әҫәрҙәр уҡыу,мәҡәлдәр табыу. Ҡылымдың шарт һөйкәлеше.
**Башҡортостан йылғалары,күлдәре.Экология мәсьәләһе**
Башҡортостандың тәбиғәте,уның байлыҡтары тураһындағы мәғлүмәт менән таныштырыу.Республикалағы йылға, күлдәр тураһында текстар уҡыу.Уларҙың атамаларының мәғәнәһе,килеп сығышы тураһында һөйләшеү.Экология мәсьәләһе.Ҡылымдың теләк һөйкәлеше.Һанарға өйрән
Көн режимы. Аҙыҡ-түлек магазины.Телмәрҙә һандарҙы практик ҡулланыу.Һан.Һан төркөмсәләре.Ябай һәм ҡушма һандар.
**Бына тағы яҙ килде**
Яҙ миҙгеленең үҙенсәлектәре. Яҙғы тәбиғәтте күҙәтеү.Осоп килеүсе ҡоштар тураһында һөйләшеү.1 май,9май байрамдары.Грамматика буйынса 6-сы класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

6 синыф Календарь-тематик план(аҙнаға 1 дәрес)

| № п/п | тема | сәғәт | Иҫкәрмә | дата план | дата Үткәр. |
|---|---|---|---|---|---|
| Беҙҙе мәктәп ҡаршылай.-2 | | | | | |
| | Фонетика һәм графика. Орфография. Республика көнө. | 1 | | | |
| | Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Ямғыр яуа. (Р. Ғарипов) | 1 | | | |
| Башҡортостан ере буйлап.-7 | | | | | |
| | Башҡорт телендә эйлек төшөнсәһе. Салауатҡа ғашиҡмын. (В. Сидоров) | 1 | | | |
| | Эйәлек зат ялғаулы исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Башҡортостан (Ә. Ихсан) | 1 | | | |
| | Сифат тураһында төшөнсә. Мин батыр (Ф. Фәтҡуллина) | 1 | | | |
| | Сифат. Сифат дәрәжәләре. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| | Синонимдар. Һөйләй тарих биттәре. | 1 | | | |
| | Антонимдар. Бына ниндәй егеттәр бар! | 1 | | | |
| | Омонимдар. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| Юл йөрөү ҡағиҙәләре һәм тамғалары. Беҙ бөтәбеҙ ҙә йәйәүлеләр.-3 | | | | | |
| | Светофор (Б.Байым) Фразеологизмдар. | 1 | | | |
| | Рәүеш. Рәүеш тураһында төшөнсә. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| | Рәүеш дәрәжәләре. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| Почта. Телеграф. Телефон.-9 | | | | | |
| | Ҡылым. Ишәк, эт, бесәй, әтәс. | 1 | | | |
| | Диктант. | 1 | | | |
| | Ҡылым һөйкәлештәре. Төн. | 1 | | | |
| | Ҡылымдың бойороҡ һөйкәлеше. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| | Ҡылымдың хәбәр һөйкәлеше. Хәзерге заман. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| | Хәбәр һөйкәлешенең хәзерге заман юҡлыҡ формаһы. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| | Хәбәр һөйкәлеше. Үткән заман. | 1 | | | |
| | Үткән замандың юҡлыҡ формаһы.Урал. | 1 | | | |
| | Хәбәр һөйкәлеше. Киләсәк заман. Сәләм Өфөнән | 1 | | | |
| Дуҫлыҡ ҡәҙерен бел.-3 | | | | | |
| | Кем дуҫ? Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| | Ҡылымдың шарт һөйкәлеше. Дуҫлыҡ ауыр саҡта һынала | 1 | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | Дуçлыҡ менән шаярмайҙар (А. Йәғәфәрованан) | 1 | | | |
| Башҡортостандың йылғалары, күлдәре. Экология мәсьәләһе.-9 | | | | | |
| | Ағиҙел буйында. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| | Ҡылымдың теләк һөйкәлеше. Башҡортостан ташатары. (Б. Мәһәҙиев) | 1 | | | |
| | Һан. Һан тураһында төшөнсә. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| | Ябай һәм ҡушма һандар. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| | Һан төркөмсәләре. Төп һандар . Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| | Рәт һандары. Бүлем һандары. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| | Диктант. | 1 | | | |
| | Йыйыу һандары. Сама һандары. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| | Кәсер һандары. «Аҡбуҙат" ипподромы. | 1 | | | |
| Бына тағы яҙ килде.-1 | | | | | |
| | I-VI кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Кеше һәм үçемлектәр. | 1 | | | |

## 7-се синыф.

## Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе

**Халыҡ ижады тураһында. Әкиәттәр**

Әкиәттәр тураһында түбән кластарҙа үткәнде иҫкә төшөрөү. Тематик яҡтан әкиәттәрҙең төркөмдәре: тормош-көнкүреш, тылсымлы, батырҙар һәм хайуандар тураһындағы әкиәттәр.

Хайуандар тураһындағы әкиәттәр. «Етем төлкө», «Айыу менән бал ҡорттары». Тылсымлы әкиәттәр. «Алтын алма», «Әбйәлил». Тормош-көнкүреш әкиәттәре «Алтын тамсы», «һаранбай менән Зиннәт ағай».

Әкиәттәрҙе мәғәнәүи өлөштәргә бүлеү. Исемдәр биреп план төҙөргә өйрәтеү.

Әҙәбиәт теорияһы.Эпитет, гипербола, аллегория төшөнсәләрен ҡабатлау.

**Риүәйәт һәм легендалар**

Риүәйәт һәм легендаларға төшөнсә биреү. Уларҙың тематик бүленеше, оҡшаш һәм айырма яҡтары. Ер-һыу, ырыу-ҡәбилә тарихы: «Етегән йондоҙ», «Ай менән Зөһрә». Ырым-ышаныу: «Сыңрау торна». Тарихи риүәйәттәр: «Бошман ҡыпсаҡ батыр». Тормош-көнкүреш риүәйәте: «Ғилмияза»

Ҡылымдарҙың затлы һәм затһыҙ, барлыҡ-юҡлыҡ формалары. Ҡылымдарҙың күләм һәм йүнәлеш категориялары менән практик таныштырыу күнегеүҙәре. Төп йүнәлештән башҡа ҡылым йүнәлештәренең айырым ялғауҙары булыуын күрһәтеү һәм башҡорт телендә биш йүнәлеш: төп йүнәлеш, ҡайтым йүнәлеше, төшөм йүнәлеше, йөкмәтеү йүнәлеше һәм уртаҡлыҡ йүнәлеше барлығын практик миҫалдарҙа күрһәтеү.

Ҡылымдарҙың затлы формаларының үҙенсәлектәрен: һан, зат, заман менән үҙгәрешен асыҡлау, уларҙы рус теленә тәржемә итеү күнегеүҙәрен эшләтеү.

Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары, уларҙың мәғәнәләре, заманформалары, һан, зат менән үҙгәреше, ниндәй һөйләм киҫәгебулаалыуы.

Хәҙерге заман хәбәр һөйкәлеше ҡылымдары, уларҙыңмәғәнәһе, яһалышы, үҙгәреше.

**Йырҙар -**

Йыр тураһында төшөнсә. Боронғо һәм хәҙерге йырҙар. Оҙон һәм ҡыҫҡа йырҙар. Йырҙарҙа көй һәм моңдоң әһәмиәте. Тематикаһы һәм йөкмәткеһе яғынан йырҙарҙың төркөмдәргә бүленеше. Халыҡтың рухи тормошонда йырҙың роле. Тарихи һәм лирик йырҙар. Тарихи йырҙар («Эскадрон», «Урал»). Тыуған ил һәм халыҡ берҙәмлеге тураһында («Йәйләүек»). Ҡасҡындар тураһында («Буранбай», «Бейеш»). Кантон башлыҡтары тураһында («Тәфтиләү», «Ҡолой кантон»). Ҡатын-ҡыҙҙар яҙмышы тураһында («Зөлхизә», «Ғилмияза»).

Хәбәр һөйкәлеше ҡылымдарының үткән заманы.

**Таҡмаҡтар**

Таҡмактар тураһында төшөнсә. Бейеү таҡмаҡтары. Уйын таҡмаҡтары. Таҡмаҡтарҙың башҡарылыу үҙенсәлектәре, уларҙың йырҙарҙан айырмаһы.

**Алтын көҙ**

М.Тажи «Алтын көҙ», Ф.Рәхимғолова «Көҙ» шиғырҙарында көҙгө тәбиғәттең, көҙ билдәләренең һүрәтләнеше.

Әҙәбиәт теорияһы:Поэтик телдәге һүрәтләү сараларын ҡабатлау. Метафора тураһында төшөнсә.

М.Ғафури.«Ҡыр ҡаҙы» хикәйәһенең идея-тематик йөкмәткеһе. Малайҙың һәм унның атаһының ҡыр ҡаҙына ҡарата мөнәсәбәте. Хикәйәлә ҡоштарға, хайуандарға һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү һәм ярҙам итеү мотивы. Кеше һәм тәбиғәт темаһына әңгәмә үткәреү.

Бойороҡ һөйкәлеше ҡылымдарының эш ҡушыуҙы, бойороуҙы белдереүе, яһалышы, һан, зат менән үҙгәреше, барлыҡта йәки юҡлыҡта килеүе.

**Уҡыу - белем шишмәһе**

Раил Байбулатов. «Нурлы күҙҙәр». Н.Мусин.«Тайғаҡ баҫма». Әҫәрҙәрҙә дуҫлыҡ, тырышлыҡ, тоғролоҡ, намыҫлылыҡ һәм әхлаҡ проблемаларының сағылышы. Хәмзә һәм уҡытыусы, һуғышветераны Уғатар ағай образдары. Рәхмәт менән Әскәт дуҫлығы. Рәхмәткә хас сифаттар. Хәмзәнең ҡылығын баһалау.

Теләк һөйкәлеше ҡылымдары, уларҙың яһалышы, мәғәнәһе, үҙгәреше.

**Дуҫлыҡта – берҙәмлек**

Б.Бикбай. «Рус теле», Р.Сафин. «Дуҫлыҡ», Ш.Бикҡол. «Дуҫлыҡ», М. Кәрим.«Миләш». Был шиғырҙарҙа дуҫлыҡты данлау. Ысын дуҫлыҡты баһалау. Рус һәм башҡорт халҡы араһындағы дуҫлыҡҡа һоҡланыу, ғорурланыу тәрбиәләү.

Р.Байбулатов. «Һарыбай». Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү. Унда дуҫлыҡтың сағылышы. Төп геройҙарҙың характерҙарына хас сифаттар.

Ә.Бикчәнтәев. «Бакенциктар илаҡ булмай». Әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү. Унда батырлыҡтың сағылышы. Ата һәм ул образдары. Шарт һөйкәлеше ҡылымдары, уларҙың яһалышы, мәғәнәһе, үҙгәреше.

**Хеҙмәте юҡтың - хөрмәте юҡ**

М.Ғафури. «Гөлдәр баҡсаһында» шиғырында эшсәнлек, дуҫлыҡ һәм дошманлыҡтың ҡапма-ҡаршы һүрәтләнеүе.

М.Ямалетдинов.«Ураҡ өҫтө» шиғырында ураҡ ваҡытында иген урыусы комбайнерҙың хеҙмәте. Уйылдан образы.

Ж.Кейекбаев.«Оморҙаҡ бабай». Хикәйәнең идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү. Оморҙаҡ бабай образына хас сифаттар.

Ҡылымдарҙың затһыҙ формалары: сифат ҡылым, хәл ҡылым, исем ҡылым, уртаҡ ҡылым. Уларҙың зат, һан менән үҙгәрмәүе.

Исем ҡылымда ҡылымлыҡ билдәләре: барлыҡ - юҡлыҡ, ҡылым күләмдәре һәм йүнәлештәре ялғауҙарын ҡабул итә алыуы.

Исемлек билдәләре: килеш, һан, эйәлек категориялары менән үҙгәреүе.

Исем ҡылымдарҙың исемгә күсеүе. Исем ҡылымдарҙы рус теленә тәржемә итеү.

Ж.Кейекбаев.«Туғандар һәм таныштар» романынан өҙөк.Өҙөктөң йөкмәткеһен үҙләштереү. Төп образдарға характеристика биреү.Һорауҙарға яуаптар биреү, план төҙөп, уның буйынса һөйләү. Башҡорт халҡының йылҡысылыҡ, солоҡсолоҡ һөнәрҙәре тураһында әңгәмә ойоштороу, яҙма эштәр башҡарыу.

Әҙәбиәт теорияһы:Герой тураһында төшөнсә.

Уртаҡ ҡылым, уның мәғәнәһе, яһалышы, барлыҡ-юҡлыҡ менән үҙгәреше. Рус телендәге уртаҡ ҡылымдың башҡорт теленә төрлө ҡылым формалары менән тәржемә ителеү мөмкинлектәрен миҫалдарҙа күҙәтеү. Киреһенсә, башҡорт телендәге уртаҡ ҡылым рус теленә төрлө ҡылымдар менән тәржемә ителә алыуын практик эштәр үтәлешендә асыҡлау.

Башҡорт телендә уртаҡ ҡылымдарҙың икенсе бер ҡылымдарҙы асыҡлап килеүе ихтимал: *бирешмәҫкә тырыша, күрергә теләй һ.б.*

Уртаҡ ҡылымдан һуң *ярай, ярамай, тейеш, тейеш түгел, кәрәк, мөмкин* модаль һүҙҙәре килеп, төрлө модаль мәғәнәләр белдерә алыуын практик күҙәтеү, уларҙы рус теленә тәржемә итеү.

**Башҡортостан-ғәзиз ерем** Ә.Үтәбай.«Башҡортостан» шиғырында лирик геройҙың кисерештәрендә Башҡортостан, Тыуған ил образы. А.Игебаев.«Онотманым һине, ауылым» шиғырында хистәр байлығы, тыуған ерҙең күңелгә яҡын булыуын еткереү.

Сифат ҡылым, унда бер үк ваҡытта сифатлыҡ һәм ҡылымлыҡ мәғәнәһенең булыуы, йәғни предметтың, заттың билдәһен уның эше, хәрәкәте буйынса белдереүе. Сифат ҡылымдың заман менән үҙгәреүе. Хәҙерге заман сифат ҡылымдың ике төрө, ябай һәм ҡушма формалары, менән практик таныштырыу, уларҙың барлыҡта йәки юҡлыҡта тора алыуы.

Үткән заман сифат ҡылым, уның яһалышы, барлыҡта, юҡлыкта килә алыуы. Киләсәк заман сифат ҡылым, уның яһалышы, төрҙәре, мәғәнәләре. Сифат ҡылымдарҙың исемләшеүе, был осраҡта исемдәргә хас категориялар менән үҙгәреүе. Рус теленән айырмалы рәүештә, башҡорт телендә исем алдында килеүсе сифат ҡылымдарҙың һан, эйәлек, килеш ялғауҙарнын ҡабул итмәүе.

Исем ҡылым, уның эш, хәл һәм хәрәкәттең исемен атауы, яһалышы.

М. Кәрим.«Ҡайын япрағы тураһында» Шиғырҙа ҡайын һәм япраҡ образы. Башҡортостандың данлы тарихының сағылышы.

**Ап-аҡ ҡарҙар яуа**

К.Кинйәбулатова.«Һаумы, аҡ ҡыш!», Ш.Бикколов. «Урман», Ә.Әхмәт-Хужа. «Эй, Ҡыш бабай, Ҡыш бабай!», Г.Ғәлиева. «Ҡарһылыу». Шиғырҙарҙа ҡыш миҙгеленең, тәбиғәт күренештәренең һүрәтләнеше.

Хәл ҡылым, уларҙың яһалышы, мәғәнәләре, төрҙәре, үҙенсәлектәре. Хәл ҡылымдар процестың билдәһен белдереүҙәре менән рәүештәргә оҡшай, ә уларҙың барлыҡ-юҡлыҡ, күләм, йүнәлеш ялғауҙары ҡабул итеүе - ҡылымлыҡ билдәләре. Хәл ҡылымдарҙың ҡулланышы һәм дөрөҫ яҙылышы.

Ә.Әһлиуллин.«Биҙәкле сана». Әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү. Боронғо сана яһау һөнәренең сағылышы. Имаметдин ҡарттың һөнәре, халыҡ араһындағы абруйы. Әҫәрҙә дуҫлыҡ, татыулык мотивы.

Ҡылым төркөмсәләренең рус теленә тәржемә ителеү үҙенсәлектәрен практик эштәр башҡарғанда күҙәтеү, уларҙы тәржемә итеү күнекмәләрен үҫтереү.

Ҡылымдарҙы дөйөмләштереп кабатлау.

**Ил намыҫы - ир күңелөндә**

Р.Шәкүр.«Һаҡта тора илдең улдары» шиғырында Тыуған илде, тыныслыкты һаҡлаусы ил улдары образдары.

Ф.Акбулатова.«Атай икмәге» хикәйәһе. Йөкмәткене үҙләштереү. Әҫәрҙә Бөйөк Ватан һуғышының һүрәтләнеше.

Рәүештәр. Уларҙың мәғәнәләре.

В.Исхаков.«Кеше күңеле - тәрән даръя». Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү. Исеменең мәғәнәһен асыҡлау. Һуғыш осоронда тылда халыҡтың тормошо һәм эшсәнлеге.

Рәүеш төркөмсәләре: төп рәүештәр, ваҡыт рәүештәре, урын рәүештәре, оҡшатыу-сағыштырыу рәүештәре, күләм-дәрәжә рәүештәре, сәбәп-максат рәүештәре тураһында төшөнсә.

А.Баһуманов.«Ҡайҙа һин генерал?». Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткәһен үҙләштереү. Проблемаларына, образдарына характеристика биреү. План төҙөп, план буйынса һөйләргә өйрәнеү.

Рәүештәрҙең яһалышы: тамыр, яһалма, ҡушма рәүештәр. Дәрәжәләре. Рәүештәрҙеңтелмәрҙә ҡулланылышы.

**Ғәзиздәрҙән-ғәзиз әсәләр**

Г.Юнысова «Әсәйҙәр байрамы», «Йырлайым әсәйҙәр тураһында» (йыр). Ф.Мөхәмәтдинов «Әсәйем ҡулы» шиғырҙарҙын һәм йырҙы тасуири уҡыу. Әсәйҙәр изгелегенең, бөйөклөгөнөң сағылышы.

Ф.Иҫәнолов. «Бер ҡаҙаҡ май». Әҫәрҙә әсә һәм бала араһындағы мөнәсәбәтте баһалау.

Ә.Бикчәнтәев.«Яраланған бүре күҙҙәре». Әҫәрҙә әсәнөң ҡыҙын үҙаллы тормошҡа әҙерләүе. Әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһөн үҙләштереү. Һорауҙарға яуап биреү, план төҙөп һөйләргә өйрәнеү.

Г.Яҡупова.«Әсәйҙәр ниңә ҡартая?», «Мейес әбей».

Әсә менән бала, ейән менән өләсәй мөнәсәбәттәрө тураһында әңгәмә ойоштороу.

Теркәүестәр. Уларҙың һөйләм киҫәктәрен һәм ҡушма һөйләмдә ябай һөйләмдәрҙе бәйләп йөрөүе. Теркәүестәрҙең төркөмсәләре: теҙеү һәм эйәртеү теркәүестәре, уларҙың телмәрҙәгө ҡулланышын күҙәтеү.

Теркәүес һүҙҙәр: парлы һәм яңғыҙ теркәүес һүҙҙәр, уларҙың һөйләмдәрҙе һәм һөйләм киҫәктәрен бәйләүе күрһәтеү алмаштары менән белдерелә, яңғыҙ теркәүес һүҙҙәр: һорау һәм күрһәтеү алмаштары менән белдерелгән парлы теркәүес һүҙҙәр.

Теркәүестәрҙең дөрөҫ яҙылышы, уларҙы телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу күнекмәләрен нығытыу.

**Эх, күңелле яҙ килә!**

Р.Ниғмәти. «Яҙ килде, яҙ!» шиғырында яҙ килеү менән тәбиғәттең уяныуының, яҙғы эштәр башланыуының һүрәтләнеше. Р.Ғариповтың «Һабантурғай» шиғырында яҙ килтереүсе һабантурғай образы. Шиғырҙарҙы тасуири уҡыу, төп идеяларын асыу.

Һ.Дәүләтшина. «Айбикә» повесы (өҙөк). Әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү. Унда азатлыҡ өсөн көрәштең, ҡатын-ҡыҙҙың рухи үҫешенең һүрәтләнеше. Ауыл кешеһе йәшәйешенең сағылышы. Образдарға характеристика.

Бәйләүестәр. Уларҙың эйәреүсе киҫәк менән эйәртеүсе киҫәкте, эйәрсән һөйләм менән баш һөйләм араһындағы бәйләнеште барлыҡҡа килтереүе. Бәйләүестәрҙең төркөмсәләре, мәғәнәләре. Уларҙың телмәрҙәге әһәмиәте. Синоним бәйләүестәрҙе ҡулланыу күнекмәләрен нығытыу.

Бәйләүестәрҙең килештәргә мөнәсәбәте: 1) исемдәрҙең төп килештә, ә алмаштарҙың эйәлек килештә килеүен талап итеүсе бәйләүестәр; 2) исемдәрҙең төбәү килешен талап итеүсе бәйләүестәр; 3) исемдәрҙең сығанаҡ килештә тороуын талап итеүсе бәйләүестәр.

**Тел - тере шишмә**

Ҡ.Аралбай. «Башҡорт тел», Ғ. Байбурин. «Тыуған иләмә» шиғырҙарында туған телгә, илгә, халыҡҡа ихтирам һәм дан йырланыуы.

М.Кәрим.«Оҙон-оҙак бала саҡ» повесы (өҙөк). Идея-тематик йөкмәкеһен үҙләштереү. Әҫәрҙә әҙәп-әхлаҡ мәсьәләләре. Оло инәй, Кендек образдарына яҙма характеристика.

Киҫәксәләр. Уларҙың айырым һүҙгә йәки һөйләмгә ниндәй булһа ла мәғәнә төҫмөрләнеше биреүсе ярҙамсы һүҙ булыуы тураһында төшенсә. Киҫәксәләрҙең төркөмсәләре, уларҙың дөрөҫ яҙылышы, телмәрҙә дөрөҫ ҡулланыу күнекмәләрен нығытыу.

**Йәмле йәй**

М.Ғафури. «Болон» шиғырында йәйге болон матурлығының тасуирланыуы.

Мөнәсәбәт һүҙҙәр. Уларҙың һөйләмдә хәбәр булып килеүе, шулай уҡ һөйләмгә төрлө модаллек мәғәнәләрен биреүгә лә хеҙмәт итеүе, дөрөҫ яҙылышы.

Х.Назар.«Йәйге йәшен». Әҫәрҙә йәйге тәбиғәт күренештәренең һүрәтләнеше.

Ымлыҡтар. Уларҙың кешеләрҙең хис-тойғоһон, теләк-ынтылыштарын белдереүе. Ымлыҡ төрҙәре, телмәрҙәге әһәмиәте, дөрөҫ яҙылышы.Ымлыҡтарҙың яңы һүҙҙәр яһауҙа нигеҙ булыуы.

С.Әлибай. «Ямғыр теләү» шиғырында ямғыр теләүҙең һүрәтләнеше.

Н.Игеҙйәнова.«Өйөрөлмәк» әҫәренең йөкмәткеһен үҙләштереү. Әҫәрҙә һүрәтләнгән хәл-ваҡиғаларҙы баһалау. Әҫәрҙең төп идеяһын һәм образдарын асыу.

**Әҙәбиәттән бөтә үтелгәндәрҙе ҡабатлау.**

**Морфология буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлауға, бәйләнешле телмәр үҫтереү -1 сәғәт.**

Үҙаллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәре араһындағы айырманыаңлата белеү. Һүҙҙәргә морфологик анализ күнекмәләрен үҫтереүөҫтөндә эш. Йыл буйына өйрәнелгән морфологик күренештәрҙе текстан таба һәм аңлата белеү.

Изложение, ирекле темаға инша яҙыу, хаталар өҫтөндә эшләү.

Ғариза тураһында төшөнсә, эш ҡағыҙҙарын яҙыукүнекмәләрен үҫтереү.

**Календарь-тематик план 7-се синыф**

| № п/п | тема | сәғәт | Иҫкәрмә | Дата | |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | план | Үткәр. |
| | Яңынан мәктәпкә-4 | | | | |
| 1. | Яңынан мәктәпкә.<br>Мостай Кәрим. Уҡытыусыма. | 1 | | | |
| 2. | Дуҫлыҡ. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| 3. | Зәйнәб Биишева. Башҡорт теле. | 1 | | | |
| 4. | Кәтибә Кинйәбулатова. Көҙҙәр еткәс. | 1 | | | |
| | Ауыл тормошо-5 | | | | |
| 5. | Ауыл тормошо.<br>Алтын башаҡтар. Көҙ уртаһы.<br>Текст буйынса эшләү. | 1 | | | |
| 6. | Диктант | 1 | | | |
| 7. | Тимер Йосопов. Икмәк еҫе. Ҡан ҡәрҙәш.<br>Текст буйынса эшләү. | 1 | | | |
| 8. | Ноғман Мусин. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| 9. | Бал ҡорто. | 1 | | | |
| | Башҡортостан буйлап сәйәхәт-5 | | | | |
| 10. | Башҡортостан буйлап сәйәхәт.<br>Башҡортостан. (М. Кәрим). | 1 | | | |
| 11. | Урал (Башҡорт халыҡ йыры.) | 1 | | | |
| 12. | Рәми Ғарипов. Урал имәне | 1 | | | |
| 13. | Арҡайым. | 1 | | | |
| 14. | Башҡорт халҡы тураһында башҡа<br>милләт кешеләре фекерҙәре. | 1 | | | |
| | Спорт. Спорт кәрәк-яраҡтары-3 | | | | |
| 15. | Спорт. Спорт кәрәк-яраҡтары.<br>Беҙҙең ғаилә-ярышта. | 1 | | | |
| 16. | Китапханала. Милли уйындар. | 1 | | | |
| 17. | Башҡортостан –чемпиондар иле. | 1 | | | |
| | Мин һәм беҙҙең ғаилә-3 | | | | |
| 18. | Мин һәм беҙҙең ғаилә.<br>Өсәй күҙҙәре. (К. Шафиҡова) | 1 | | | |
| 19. | Зат алмаштары.<br>Фәһемле һүҙҙәр. | 1 | | | |
| 20. | Ҡошҡа әйләнгән әбей. Ғаилә, ата-әсәләр<br>тураһында мәҡәлдәр һәм әйтемдәр. | 1 | | | |
| | Өсәй, әсәкйем-2 | | | | |
| 21. | Өсәй, әсәкйем.<br>Теркәүестәр. Теҙеү теркәүестәре.етгеән<br>йондоҙ. | 1 | | | |
| 22. | Йыһат Солтанов.Ҡәнәфер сәскәһе. | 1 | | | |
| | Сәнғәт оҫталары-4 | | | | |
| 23. | Сәнғәт оҫталары.<br>Эйәртеү теркәүестәре. Күнегеүҙәр | 1 | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | эшләү. | | | | |
| 24. | Ҡумыҙсы Роберт Заһретдинов | 1 | | | |
| 25. | Мәшһүр бейеүсе Рәшидә Туйсина | 1 | | | |
| 26. | Салауат Юалаев. | 1 | | | |
| Исемең матур, кемдәр ҡушҡан-2 | | | | | |
| 27. | Исемең матур, кемдәр ҡушҡан.<br>Исемдәрҙә ил тарихы.Бәйләүестәр. | 1 | | | |
| 28. | Диктант | 1 | | | |
| Борон-борон заманда-2 | | | | | |
| 29. | Борон-борон заманда. Әкиәттәр. | 1 | | | |
| 30. | Киҫәксәләр. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| Берҙәмлек, Дуҫлыҡ, тыныслыҡ-4 | | | | | |
| 31. | Берҙәмлек, Дуҫлыҡ, тыныслыҡ.<br>Шәриф Биҡҡол. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| 32. | Мөнәсәбәт һүҙҙәр. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| 33. | Сафуан Әлибай. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |
| 34. | Ымлыҡтар. Күнегеүҙәр эшләү. | 1 | | | |

**8-се синыф.**

**Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе.**

**Мәктәпкә барабыҙ**

Был тема буйынса 5-6 класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау, һүҙлек байлығын арттырыу. Тема буйынса эҙмә-эҙлекле һөйләмдәр төҙөтөү, ҡыҫҡа ғына хикәйә төҙөргә өйрәтеү. Текст өҫтөндә эшләү,план төҙөү, план буйынса һөйләү. Мәктәп, класс торошо һ.б. хаҡында әңгәмәләр ойоштороу. Белем, китап тураһында мәҡәлдәр ҡойоу. 5-6 класта үтелгәндәрҙе иҫкә төшөрөү. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. Өндәрҙе дөрөҫ әйтеү.

**Көҙгө эштәр һәм көҙгө күренештәр**

Көҙгө үҙгәрештәрҙе бергәләп күҙәтеү, кешеләрҙең көҙгө хеҙмәтен күҙәтеү. Темаға ҡағылышлы текстар уҡыу. Муллыҡ, хеҙмәт тураһында мәҡәл, әйтемдәр менән танышыу. Һынамыштар уҡыу. Синтаксис. Маҡсаты буйынса һөйләм төрҙәре. Логик баҫым. Исем менән ҡылымды ҡабатлау.

**Өфө - Башҡортостандың баш ҡалаһы**

Өфө - башҡортостандың баш ҡалаһы. Өфө ҡалаһы, уның үткәне, бөгөнгөһө тураһында әңгәмә үткәреү. Уның иҫтәлекле урындары тураһында һөйләшеү, һүрәттәр ҡарау. Һөйләм телмәрен үҫтереү. Башҡорт ҡылымдарының төҙөлөшө. Барлыҡ төшөнсәһе һәм уның бирелеше.

**Хеҙмәт төбө - хөрмәт**

Кеше тормошонда хеҙмәттең роле, тигән темаға әңгәмә ҡороу. Данлыҡлы хеҙмәт ветерандары менән осрашыу ойоштороу. Уҡыусыларға ниндәй һөнәр оҡшауы тураһында һөйләтеү, яңы мәғлүмәттәр биреү. Һөнәрҙәр тураһында шиғырҙар, хикәйәләр уҡыу. Хеҙмәт , һөнәрҙәр тураһында мәҡәлдәр өйрәнеү. Ябай һөйләм. Һөйләмдең баш киҫәктәре. Эйә менән хәбәрҙең ярашыуы. Юҡлыҡ, булмағанлыҡ төшөнсәләре.

Ҡыш тураһында текстар, шиғырҙар, мәҡәлдәр, һынамыштар уҡыу яңы йылға бағышланған йырҙар, мәҡәл һәм әйтемдәр. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. Эйә менән хәбәр араһында һыҙыҡ.

**Салауат Юлаев – халҡыбыҙҙың милли батыры**

С.Юлаевтың биографияһы, ижады менән танышыу. Уның шиғырҙарын ятлау, шиғырҙарының һаҡланыу тарихы тураһында әңгәмә ойоштороу. С.Юлаевтың тормошо, батырлығы, ижады тураһында уҡыусыларҙан төрлө ижади эштәр эшләтеү. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре тураһында төшөнсә. Аныҡлаусы.

**Йәмле яҙ, һағындыҡ һине!**

Яҙ миҙгеле тураһында белемдәрҙе системалаштырыу. Яҙғы байрамдар- 1 Май һәм Еңеү байрамы тураһында һөйләшеү. Яҙғы тәбиғәт күренештәре, ҡоштарҙы ҡаршылау, баҡса эштәре тураһында әңгәмәләр үткәреү. Тултырыусы.

**Беҙ йондоҙҙар булып ҡайтырбыҙ**

Башҡорт халҡының Бөйөк Ватан һуғышындағы ҡаһарманлығы. Ветерандарға, батырҙарға ҡарала ихтирам, ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү. Данлыҡлы кешеләр менәнкисәләр, осрашыуҙар ойоштороу. Хәл. Һүҙлек менән эш күнек мәләре үткәреү.

**Ай Уралым, Уралым...**

Башҡортостан, уның үткәне, бөгөнгөһө хаҡында әңгәмә үткәреү. Республикабыҙҙың күренекле урындары менән таныштырыу. Йәйге тәбиғәтте күҙәтеү, ололарҙың һәм балаларҙың йәйге эштәре тураһында диолог һәм монологтар төҙөү.8- се класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

## Календарь-тематик план.

| № | Тема | сәғәт | VIII | | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | план. | үткәр. | |
| | **Мәктәпкә барабыҙ-4** | | | | |
| 1. | Көҙ күренештәре. Ҡылымдар темаһын ҡабатлау. | 1 | | | |
| 2. | Мәктәптә. Ҡылымдарҙың зат ялғауҙары. | 1 | | | |
| 3. | Б.Бикбай. Туған тел. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | 1 | | | |
| 4. | Б.Рафиҡов. Илем, Башҡортостаным! Ҡушма һүҙҙәр. | 1 | | | |
| | **Көҙгө эштәр һәм көҙгө тәбиғәт -8** | | | | |
| 5. | Ф.Ғөбәйҙуллина. Көҙ. Хәбәр һөйләмдәр. | 1 | | | |
| 6. | С.Муллабаев. Көҙгө урман. Һорау һөйләмдәр. | 1 | | | |
| 7. | Көҙгө баҡса эштәре. Бойороҡ һөйләмдәр. | 1 | | | |
| 8. | Н.Иҙелбай.Һөнәрлеләр һөйкөмлө. Өндәү һөйләмдәр. | 1 | | | |
| 9. | А.Игебаев. Тәмлене дә тәмлеһе. Логик баҫым. | 1 | | | |
| 10. | Фразеологик берәмектәр. Көҙгө уңыш. | 1 | | | |
| 11. | Р.Игнатьев. Башҡорт халыҡ йырҙары. | 1 | | | |
| 12. | **Диктант.** Ысын дуҫлыҡ. | 1 | | | |
| | **Өфө – Башкортостандың баш ҡалаһы -3** | | | | |
| 13. | Өфө - беҙҙең баш ҡалабыҙ. Аттарҙа сабып ҡына. | 1 | | | |
| 14. | Башҡорт ҡылымдарының төҙөлөшө.Башҡорт лимоны. | 1 | | | |
| 15. | Р.Абдулатипов.Өфө тарихы. Барлыҡ төшөнсәһе. | 1 | | | |
| | **Хеҙмәт төбө – хөрмәт -8** | | | | |
| 16. | Хеҙмәт төбө - хөрмәт. Ябай һөйләм төрҙәре. | 1 | | | |
| 17. | Башҡорттар әрме хеҙмәтендә. Йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәр. | 1 | | | |
| 18. | А.Насиров. Көслө сабаҡ. Һөйләмдең баш киҫәктәре. | 1 | | | |
| 19. | Н.Бадридзе. Зарядкаға баҫ. Эйә менән хәбәрҙең ярашыуы. | 1 | | | |
| 20. | Геологтар көнө. Юҡлыҡ, булмағанлыҡ төшөнсәһе. | 1 | | | |
| 21. | Ә.Атнабаев. Ҡара икмәк. | 1 | | | |
| 22. | Эйә менән хәбәр араһында һыҙыҡ. | 1 | | | |
| 23. | Н.Нәжми. Ҡыш. | 1 | | | |
| | **Салауат Юлаев – халкыбыҙҙың милли батыры -7** | | | | |
| 24. | Салауат Юлаев – халҡыбыҙҙың милли батыры. Риүәйәт. | 1 | | | |
| 25. | Салауаттың туғандары. Аныҡлаусы. | 1 | | | |
| 26. | Палдискиҙа Салауат музейы. Б.Вәлид. Салауат маршы. | 1 | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 27. | А.Кузнецов. “Салауаттан һорау алыу” картинаһы. Салауат һәйкәле. | 1 | | | |
| 28. | 8 март – Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнө. Конференция. | 1 | | | |
| 29. | К.Кинйәбулатова. Йырлай-йырлай еңеү яуланыҡ. Тултырыусы. | 1 | | | |
| 30. | Р.Ниғмәти. Ватан. | 1 | | | |
| | **Беҙ йондоҙҙар булып ҡайтырбыҙ-2** | | | | |
| 31. | С.Әлибай. Сәскәле ай. Һалдат тора киләсәкте тотоп. | 1 | | | |
| 32. | М.Харис. Хат. Үлемһеҙ батырлыҡ. | 1 | | | |
| | **Ай Уралым, Уралым…-2** | | | | |
| 33. | Тыуған ерем биҙәктәре. Урманды һаҡлайыҡ! | 1 | | | |
| 34. | Р.Ниғмәтуллин. Башҡортостан. | 1 | | | |

## 9-сы синыф.

### Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе

**Һаумы, мәктәп!**

Эш төрҙәре «Көҙ» темаһы менән берлектә алып барыла. «Көҙ» һәм «Мәктәп» темаһына шиғырҙар, әҫәрҙәр уҡыу; мәҡәл, әйтемдәр, йомаҡтар, һынамыштарҙы иҫкә төшөрөү.

Алдағы кластарҙа үтелгәндәрҙе системалаштырыу, яңы мәғлүмәт менән таныштырыу. Һөйләү һәм яҙыу телмәрен үҫтереү өҫтөндә эш дауам итә.

**Ергә мәрхәмәт – илгә бәрәкәт.**

Тыуған Республикаға ҡарата мөхәббәт, ғорурлыҡ тойғоһо, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләргә. Улар тураһында һөйләргә, яҙырға өйрәтеү. Башҡортостандың ер аҫты, ер өҫтө байлыҡтары тураһында әңгәмәләр үткәреү, экскурсиялар ойоштороу.

**Атамалар ни һөйләй?**

Кеше тормошонда атамаларҙың да (кеше исеме, фамилияһы, атаһының исеме; ауыл, ҡала, тау, йылға һ.б.) роле ҙур. Унһыҙ тормошто күҙ алдынала килтереп булмай. Атамалар бик күп. Тел ғилемендә уларҙы өйрәнеүсе фән бар. Ул – ономистика. Онамистика фәне үҙе бер нисә тармаҡтан тора: антропонимика, этнонимика, милли, халыҡ, ҡәбилә исемдәрен, зоонимика ҡош-ҡорт, хайуан ҡушаматтарын, космонимика өйрәнеүсе фән.

Был теманы үтеү уҡыусының бала саҡтан уҡ үҙҙәре йәшәгән ауыл, ҡала, уларҙың янындағы атамаларҙың мәғәнәләрен белергә теләгән ҡыҙыҡһыныуын ҡәнәғәтләндерә, тыуған төйәк менән ғорурланырға мөмкинлек бирә. Сөнки атамаларҙа ил тарихы, ер һәм ошо ерҙә йәшәгән халыҡтың тел үҙенсәлектәре, халаҡ тормошо, ғөрөф-ғәҙәте, йолалары һ.б. сағыла.

**Беҙ ҡышты ла яратабыҙ.**

Бәйләнешле телмәрҙең яҙма һәм телдән формаларына берҙәй әһәмиәт бирелә. Ҡыш миҙгеле, уның үҙенсәлектәре тураһында һөйләү күҙ уңында тотола.

**Башҡорт театры.**

Башҡортостанда театр сәнғәте. Республикалағы театрҙар һәм уларҙың эшмәкәрлеге хаҡында дөйөм мәғлүмәт биреү. М.Ғафури исемендәге Башҡорт Академия драма театрының барлыҡҡа килеүе тарихы (халыҡ артистары З.Бикбулатова, А.Мөбәрәков, Г.Мөбәрәкова). Театорҙың күренеклк артистарының тормошо һәм ижады менән таныштырыу, улар тураһында һөйләргә өйрәтеү.

Театрҙың үткәне һәм киләсәге буйынса фекер алышыу ойоштороу.

**Башҡорт халыҡ ижады.**

Халыҡ ижады тураһында дөйөм төшөнсә. Фольклорҙың коллектив ижад булыуы. Фольклор һәм яҙма әҙәбиәттең айырмаһын билдәләү, улар тураһында һөйләргә өйрәтеү.

**Башҡорт аты.**

Уҡыусылырҙы башҡорт атының килеп сығыуы, тарихи үткәне менән таныштырыу. Аттарҙың кеше тормошондағы мөһим ролен билдәләү. Йәш үһенсәлектәре буйынса бүленеүен билдәләү, уҡыусылырҙан дөрөҫ итеп әйттереү. Аттарға ҡарата ҡыҙыҡһыныусанлыҡ, улар тураһында күберәк белеү теләге тыуҙырыу.

**Башҡорт халыҡ милли аштары.**

Башҡорт халҡының милли аштары менән таныштырыу. Уларҙы әҙерләү үҙенсәлектәренбилдәләү. Башҡорт милли аштары тураһында текстар менән таныштырыу.

Уҡыусылырҙың һөйләү, яҙыу телмәрен үҫтереү өҫтөндә ентеклк эш дауам итә.

**Күңелле яҙ килә.**

Башҡортостандағы яҙғы тәбиғәт күренештәре. Ҡала һәм ауылда яҙғы эштәр: ҡоштар, хайуандар һәм үҫемлектәр тормошо, яҙғы байрамдар тураһында әңгәмәләр үткәреү. Тәбиғәткә экскурсиялар ойоштороу. Дарыу үләндәренән гербарийҙар төҙөү, Еңеү көнөн билдәләү. Һуғыш ветерандары менән осрашыу, иҫтәлектәр яҙып алыу буйынса эш дауам итә.

## Календарь – тематик планлаштырыу

| № | Тема | сәғәт | IX | | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | План. | Үткәр. | |
| | **Һаумы мәктәп.-3** | | | | |
| 1. | А.Игебаев. Бик тә кәрәк тыныслыҡ. | 1 | | | |
| 2. | М.Аҡмулла. Күҙ. Антонимдар. | 1 | | | |
| 3. | Аҡкош. Осоу юлдары. Эйә менән хәбәр. | 1 | | | |
| | **Ергә мәрхәмәт – илгә бәрәкәт. -6** | | | | |
| 4. | Н.Мусин. Һай урманым… Ҡылым. | 1 | | | |
| 5. | Т.Ғәниева. Оло ялан. | 1 | | | |
| 6. | Күренеклк шәхестәр. Хәлдәр. | 1 | | | |
| 7. | Башҡорттар ҡайҙан килеп сыҡҡан? Ваҡыт хәле. | 1 | | | |
| 8. | А.Игебаев. Донъябыҙҙан ни ҡала? | 1 | | | |
| 9. | Диктант. | 1 | | | |
| | **Атамалар ни һөйләй? -3** | | | | |
| 10. | Ағиҙел.Күләм-дәрәжә хәле. | 1 | | | |
| 11. | Ҡ.Аралбай. Ҡарауанһарай. | 1 | | | |
| 12. | Ҡ.Аралбай. Янғантауға мәҙхиә. Шарт хәле. | 1 | | | |
| | **Беҙ ҡыштылы яратабыҙ. -2** | | | | |
| 13. | Ф.Рәхимғолова. Ҡыш. | 1 | | | |
| 14. | Ш.Бабич. Ҡышҡы юлда. | 1 | | | |
| | **Башҡорт театры. -2** | | | | |
| 15. | Ф.Фәткуллин. Өфөлә театрҙар. Өҫтәлмәләр. | 1 | | | |
| 16. | Арыҫлан Мөбәрәков. Нурия Ирсаева. | 1 | | | |
| | **Башҡорт халыҡ ижады.-4** | | | | |
| 17. | «Урал батыр» эпосы. | 1 | | | |
| 18. | Һандар. Һөйләм. Бер составлы һөйләмдәр. | 1 | | | |
| 19. | Алпамыша батыр. | 1 | | | |
| 20. | Башҡорт халыҡ ижадында һандар. | 1 | | | |
| | **Башҡорт аты. -4** | | | | |
| 21. | Н.Иҙелбаев. Ел, ерәнем. | 1 | | | |
| 22. | Ҡара юрға. Тиң киҫәкле һөйләмдәр. | 1 | | | |
| 23. | Тиң киҫәктәр эргәһендә дөйөмләштереүсе һүҙҙәр. | 1 | | | |
| 24. | С.Агиш. Турыҡай. | 1 | | | |
| | **Башҡорт халыҡ милли аштары. -6** | | | | |
| 25. | Икмәк. Ҡымыҙ.. | 1 | | | |
| 26. | Бал. Ҡушма һөйләмдәр | 1 | | | |
| 27. | Һ.Дәүләтшина. Ялсылыҡта. | 1 | | | |
| 28. | З.Биишева. Дуҫ булайыҡ. | 1 | | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 29. | Икмәк хаҡы. | 1 | | | |
| 30. | Ҡорот. | 1 | | | |
| | **Яҙ килә. -4** | | | | |
| 31. | А.Игебаев. Яҙ бүләге. | 1 | | | |
| 32. | Ғәлим Дәүләди.<br>Нөгөш шишмәләре. | 1 | | | |
| 33. | Диктант. | 1 | | | |
| 34. | М.Кәрим. Өс әхирәт. | 1 | | | |

**Башҡорт теленән белем һәм күнекмәләрен баһалау нормалары**

Рус телле мәктәптәрҙә уҡыусыларҙың белем һәм күнекмәләрен баһалау маҡсатында, юғары синыфтар өсөн, махсус нормалар билдәләнә. Был нормалар саф башҡорт мәктәптөре йәки башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүсе мәктәптөр өсөн билдәләнгән нормаларҙан бер ни тиклем айырыла. Ҡулланыу өсөн уңайлы тип иҫәпләп, бөтә нормаларҙы бер урынға туплау урынлы тип табылды.

**1. Балаларҙың укыу һәләтлектәрен баһалау**

Уҡыусыларҙың башҡорт телендә уҡыуын, яуаптарын баһалағанда, уларҙың тәҡдим ителә торған тексты аңлы һәм тасуири уҡыуы, йөкмәткеһен тейешле кимәлдә үҙләштереүе, кәрәкле кимәлдә һөйләй алыуы иҫәпкә алына.

Йыл аҙағына уҡыу тиҙлеге минутына түбәндәгесә билдәләнә:

| синыф | Һүҙ | Билдә | Эстән укыу |
|---|---|---|---|
| 5-се | 70-85 | 230 - 250 | 95-110 |
| 6-сы | 90 - 100 | 250 - 280 | 120-150 |
| 7-се | 100-120 | 300 - 320 | 160 - 180 |
| 8-се | 130-150 | 320 - 350 | 180 - 200 |
| 9-сы | 160 - 200 | 350 - 400 | 250 - 300 |

Уҡыу техникаһы тураһында һөйләгәндә, шуны иҫтә тоторға кәрәк:

1. Кешегә, ғәҙәттә, күберәк эстән уҡырға тура килә. Шуға күрә дәрестәрҙә балаларҙы бәләкәй синыфтарҙа ҡысҡырып укырға өйрәтеү норма һанала.

Эш методикаһын ошондайыраҡ итеп ойоштороу кәңәш ителә: баһаға уҡыу өсөн, һәр уҡыусыға айырым текст әҙерләнә, әммә шиғри әҫәрҙәр алыу уңайлы түгел. Текстар хикәйәләү формаһында, йөкмәткеһе тамамланған, ваҡиғалар һүрәтләнеше эҙмә-эҙлекле булырға тейеш. Текстағы һүҙҙәр, билдәләр алдан һанап ҡуйыла. Бала ошо тексты күпме ваҡытта уҡый, шунан сығып уның бер минутта уртаса нисә һүҙ уҡыуы асыҡлана.

2. Уҡыу техникаһын формалаштырыу 4-се синыфта тамамлана. Ә юғары синыфтарҙа уҡыу һәләтлеген камиллаштырыу регуляр рәүештә үткәрелә. Үрҙә килтерелгән цифрҙаруҡытыусыға ориентир өсөн тәҡдим ителә. Балаларҙың телде белеү кимәленән сығып, уҡытыусы был һандарҙы ижади ҡулланыуға хоҡуҡлы.

## 2. Яҙма эштәрҙең күләме һәм уларҙы баһалау нормалары

Уҡытыу рус телендә барған мәктәптәрҙә башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә яҙма эштәрҙең төрлө формалары ҡулланыла. Уларҙың ҡайһы берҙәре башланғыс синыфтарҙа, ҡайһылары юғары синыфтарҙа күберәк һәм өйрәтеү маҡсатында үткәрелә. Шулай уҡ яҙма эштәр (бигерәк тә юғары синыфтарҙа) уҡыусыларҙың белем Һәм күнекмәләрен тикшереү өсөн дә файҙаланыла. Яҙма эштәрҙең рус телле мәктәптәрҙә киң ҡулланыла торған түбәндәге төрҙәрен күрһәтергә мөмкин:

—һүҙҙәрҙе, типик һөйләмдәрҙе күсереп яҙыу;

—һүҙлек диктанттары;

—ғәҙәти диктанттар;

—һорауҙарға яуаптар;

—тестарға яуаптар, яҙыу;

Әйтергә кәрәк, һаналған яҙма эштәрҙе башланғыс синыфтарҙа элементар характерҙа, өйрәтеү маҡсатында һәм ныҡлы әҙерлектән һуң ғына яҙҙырыу кәңәш ителә. Әҙерлек эштәре төрлөсә булырға мөмкин: һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе яҙыр алдынан Бер нисә тапҡыр телдән әйттереү, ниндәй хәрефтәр яҙылыуын анализлау, һүҙҙәрҙе һауала (таҡтала) яҙып ҡарау, таҡтала яҙылғандарҙы күмәкләп тикшереү, хаталарын төҙәтеү һ.б. Фәҡәт ошондай әҙерлек эштәре үткәрелгәндән һуң ғына, эштәр аҡҡа яҙыла. Дөрөҫ, әҙерлек эштәрен уҡытыусы, үҙ уҡыусыларының әҙерлек, телде белеү кимәленән сығып, үҙенсә хәл итә ала.

Юғары синыфтарға күсә барған һайын, яҙма эштәрҙе яҙҙырыу методикаһы ҡатмарлана, йәғни, башҡорт мәктәптәрендә ҡулланыла торған алымдарға яҡыная бара. Был синыфтарҙа контроль характерындағы яҙма эштәргә өҫтөнлөк бирелә.

—Өйрәтеү характерындағы яҙма эштәр, һүҙлек диктанттары был таблицаға инмәй, улар ғәҙәттәге дәрестәрҙә үткәрелә. Уларҙың йышлығын, күләмен уҡытыусы үҙе билдәләй.

—Күсереп яҙыу өсөн тәҡдим ителә торған текст күләме контроль диктант тексы күләменә тап килә. Ғөмүмән, һәр дәрестәге яҙыу эштәре лә шул синыфтағы контроль диктант тексы күләменә тап килергә тейеш.

—Контроль характерҙағы яҙма эштәр текстарының күләме түбәндәгесә билдәләнә:

| Эш төрҙәре | синыф | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
| Һүҙлек диктанты | 12-15 | 15-18 | 18-20 | 20-22 | 22-24 |
| Диктант | 40-50 | 60-70 | 70-80 | 80-90 | 90-100 |

Был ваҡыт эсендә уҡыусылар ижекләп, һүҙләп күсереп яҙа, диктант, яҙма эштәрҙе башҡара. Ваҡытты шунан да күберәк биреү кәңәш ителмәй. Әммә (конкрет ситуацияға ҡарап, яҙма эштәр башҡарыуға ваҡытты уҡытыусы 3-5 минутҡа оҙайта йәки ҡыҫҡарта ала.

Юғары синыфтарҙа яҙма эштәрҙе үткәргәндә, балаларҙың уҡыу тиҙлеге лә яҙма эштәрҙе үткәреү ваҡыты ла конкрет ситуацияға ҡарап билдәләнә.

Урыҫ телле мәктәптәрҙә башҡорт теленән ҡуйыла торған баһалар башҡа предмет буйынса алған баһаларҙан кәм булырға тейеш түгел. Шуға ла былдай мәктәптәрҙә башҡорттеленән яҙма эштәр ныҡлы әҙерлек үткәргәндән һуң ғына башҡарыла.

Баһалар, нигеҙҙә, уҡыусыларҙы башҡорт телен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу, дәртләндереү маҡсаты менән ҡуйыла.

Шик юҡ, мәктәптә уҡытыла торған башҡа предметтарҙы өйрәнгәндә лә башҡорт теленә мөрәжәғәт итеү уны үҙләштереүгә ҡыҙыҡһыныу уята.

Шулай итеп, башҡорт телендә һөйләшеү, уҡыу, яҙыу күнекмәләрен үҙләштереү балаларға юғары кластарҙа белем алыуға нигеҙ әҙерләй, уларға республика, уның тәбиғәте, халҡы, сәнғәте, әҙәбиәте тураһында күберәк информация алырға ярҙам итәсәк. Юғары синыфтарҙа былдай эштәр тағы ла тәрәнерәк, күләмлерәк итеп үткәрелә. Былар бөтәһе лә республика илһөйәрҙәрен, юғары әхләкле шәхестәр тәрбиәләүгә ҙур мөмкинлек аса.

**Яҙма эштәрҙе баһалау нормалары.**

Диктанттарҙы баһалау.

Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәр өсөн әҙерләнгән диктанттар тексына бөтә үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙҙәр инә.Грамматик эштәр өҫтәп бирелгәндә,диктант текстары бер аҙ ҡыҫҡартыла.Орфограммаларҙың һәм пунктограммаларҙың дөйөм һаны түбәндәгеләрҙән артмаҫка тейеш:III- 5/2 , IV-6/2 , V -8/3 VI-10/3 , VII -12/6, VIII-14/6, IX-16/6

Диктантты баһалағанда төҙәтелә,әммә иҫәпкә алынмай торған хаталар:

1) мәктәп программаһына индерелмәгән ҡағиҙәләргә яҙылыштар;
2) әле үтелмәгән ҡағиҙәләргә яһалған хаталар;
3) автор ҡуйған ҡатмарлы пунктуация;
4) механик рәүештә бер хәреф урынына икенсеһен яҙыу.

Тупаҫ булмаған хаталар:

1) ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәләренә ҡараған хаталар;
2) бәйләү юлы менән яһалған ҡушма яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышына хаталар;
3) бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу;
4) үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ялғауҙары яҙылышына хаталар.

Диктант бер генә билдә менән баһалана.

«5» - хатаһыҙ йәки тупаҫ булмаған 1орфографик, 2 пунктуацион хата булған эшкә: 1/0, 1/2, 0/2.

«4» - 2 орфографик, 2 пунктуацион , 1орфографик, 3 пунктуацион: 2/2,1/3,2/3,3/3, 1/5, 0/7.

«3» -4 орфографик, 4пунктуацион, 3 орфографик, 5 пунктуацион: 4/4,3/5,3/6, өс бер типтағы хата ебәрелһә, 6/6 хаталы эшкә лә өс ҡуйыла.

«2» - 9 орфографик, 9 пунктуацион: 8/10, 9/9.

«1» - уҡытыусы ҡарамағында.

**Диктант текстары**

**5-се синыф.**

Муйыл.

Йәмле яҙ көндәрендә кешеләр хуш еҫле муйыл сәскәһен бер – береһенә бүләк итер өсөн ағасты йәлләмәй һындыра. Ә инде имен – аман һаҡланып ҡалғандары емеш бирһә, муйылға йәнә бәлә килә. Ауыл кешеләре лә, сит – ят ерҙәрҙән килеүселәр ҙә ағас ботаҡтарын һындырып, емешен биҙрә - биҙрә тиреп ала. Муйылды рәнйетеүҙәре хаҡында уйлап та ҡарамайҙар. (50 һүҙ)

1. Исемдәргә һыҙығыҙ.

Өләсәйем.

Минең өләсәйем элек заводта эшләгән. Хәҙер ул өйҙә генә тора. Өләсәйем бик уңған. Ул тәмле итеп бәлеш бешерә. Ҡаймаҡты өләсәйем кеүек ҡойған кешене тапмаҫһың. Өләсәйемдең ҡулдары һис тик тормай. Ул йә йөн иләй, йә ойоҡбаш бәйләй. Беҙ өләсәйемде бик яратабыҙ. («Йәншишмә» гәзитенән.)

1. Аш-һыу исемдәрен тәржемә итеп яҙығыҙ.
2. Һуңғы һөйләмдәге һүҙҙәрҙе ижектәргә бүлеп яҙығыҙ.

**6 – сы синыф.**

Ололар ни әйтә.

Өс таған таймаҫ. Йөҙ һум аҡсаң булғансы, йөҙ дуҫың булһын. Яҡшы дуҫ яфаға һалмаҫ. Бүре менән дуҫ булһаң, этең янында булһын. Дошманыңа тура әйтһәң, дуҫыңа 15 өлгө булыр. Дуҫ биргәндең тышына ҡарама. Кемдең белеме бар, шуның ҡәҙере бар. Күҙе һуҡырға юлдаш булһаң да, күңеле һуҡырға юлдаш булма. Юлдашың үҙеңдән яҡшы булһын. Ололарҙы ололау – яҡшылыҡтың билдәһе. Кәңәшле ил тарҡалмаҫ. Күл тамсынан йыйыла. (60 һүҙ)

1. Текста ҡылымдарҙы табып, аҫтына һыҙығыҙ.
2. Ҡылымдарҙың заманын билдәләгеҙ.

Илем – Башҡортостан.

Башҡортостан – бик бай ил. Унда нимәләр генә юҡ! Аҡ бүрекле тауҙар ҙа, ҡылғанлы киң яландар ҙа, көмөш һыулы йылғалар ҙа,зәңгәр күлдәр ҙә, икһеҙ-сикһеҙ урмандар ҙа күп бында.

Беҙ йәшәгән ерҙең  байлыҡтарыр һанап бөткөһөҙ. Нефть һәм газ тиһеңме, күмер һәм металл тиһеңме, алтын һәм баҡыр тиһеңме – бөтәһе лә бар был ерҙәрҙә.

Шулай уҡ ҡиммәтле тиреле хайуандары, иҫ киткес балы менәндан ҡаҙанған Башҡортостан. (65 һүҙ) (Ғ.Рамазанов)

1. Сифаттарҙы табып, аҫтына һыҙығыҙ
2. Шул сифаттарҙың ниндәй антонимдары һәм синонимдары бар яҙығыҙ.

**7-се синыф.**

Сәскә - тормош йәме.

Ергә яҙ килде. Ҡар ирей, гөрләүектәр аға, йылғалар таша, боҙҙар китә. Беҙ яҙ матурлығын йәшеллектә, ҡоштар моңонда, сәскәләрҙә күрәбеҙ. Иң беренсе үгәй инәй үләне сәскәләнә. Унан умырзая беҙҙе ҡыуандыра.

Яҙҙың тәүге сәскәләре бик күп: баллыҡай, күк умырзая, кәкүк емеше, кәзә һаҡалы, сибәркәй, ҡарлуғас үләне, ҡаҙ йыуаһы, һары умырзая. Был сәскәләр йылдан-йыл аҙая бара. Сәскә атҡанда кеше уларҙы самаһыҙ күпләп йыя, тәбиғәттең йәмен ебәрә.

Сәскә - тормош йәме. Бөтәбеҙ ҙә уға ҡарап һоҡланайыҡ, һаҡлайыҡ. (76 һүҙ)

1. Текстағы ҡылымдарҙың аҫтына һыҙығыҙ, заманын билдәләгеҙ.
2. Теҙең теркәүестәре ҡулланып, ике һөйләм яҙығыҙ.

ҮРЛӘҮ

Бер бала ағасҡа үрмәләй. Өҫкә менгән һайын баҫҡан бер ботағын тырышып- тырышып һындырып төшөрә бара. Ағастың осона еткәс, ниндәйҙер ғорурлыҡ менән тирә-яҡты байҡап тора, һуңынан кире төшә башлай. Аяҡтары менән һындырған ботаҡ урындарын һәрмәп ҡарай, ләкин улар таяныс булырлыҡ түгел ине инде. Әммә ул, олонға йәбешеп, ҙур ҡыйынлыҡ менән аҫҡа шыла, тотонорға хәле етмәй, шыуып төшөп китә лә бөтөн, беләктәрен ҡанға туҙҙырғансы һыҙырта. Үрләгәндә баҫҡан ботаҡтарҙың төшкәндә лә кәрәк буласағын онотҡайны шул был бала. (З.Ураҡсин.)

1. Һүҙҙәрҙәге күплек ялғауҙарының аҫтына һыҙығыҙ.
2. Хәл ҡылымдарҙың аҫтына һыҙығыҙ.

**8-се синыф.**

Ирәмәл һырттары.

Яҙғы көндөң иртәнге йылы ҡояшы дымлы ер өҫтөнә күтәрелгән быуҙарҙан үтә төштө,уларҙы йәшелле-күкле ,юлаҡ-юлаҡ төрлө төҫтәге матур нурҙарға әйләндерҙе.

Шоңҡар ауылының тирә-яҡ тигеҙлегенән һөҙәкләнә барып,бейегәйеп киткән ҡырлас тауҙар унар саҡрымдарға һуҙылып алыҫаялар ҙа,Ирәмәлдең нәҙек һыҙыҡтар шикелле күренгән ҡаяларына барып тоташалар.Унан да уҙғас,Ирәмәл түбәһенең ҡайһы бер урындарында әллә ҡармы,әллә бейек тауҙың битәрен һыйпап үткән болоттармы икәне лә айырылмай торған ҡайһылары аҡ,ҡайһылары ҡара нөктәләр генә күренәләр.
Аҡҡондоҙ йылғаһының аръяғында сусаҡ тауҙың итәген ҡаплап үҫкән шыршы,ҡарағайҙар,йәшел ботаҡтарын ҡар һыуына мансып алған һымаҡ,тағы ла матур,тағы ла йәшелерәк булып асылғандар.Улар менән аралаш йәш ҡайын сауҡалары ла ваҡ ҡына булып шытып килгән бөрөләренең морондарын яҙғы йылы елгә елберләтеп ултыралар.(106 һүҙ)(Һ.Дәүләтшина).

Бал.

Боронғо Грецияның атаҡлы математигы Пифагор балдың кеше ғүмерен оҙайтыуы тураһында яҙып сыҡҡан.Үҙе лә балды йыш ашаған һәм 90 йәшкә тиклем йәшәгән.
Шулай уҡ боронғо грек философы Демокрит та 100 йылдан артыҡ йәшәгән.Ул да балдың сәләмәтлек өсөн файҙалы булыуын әйткән.Атаҡлы табип Әбуғалисина йәшлекте һаҡлау өсөн бал ашарға кәңәш иткән.
Юҡҡа ғына әйтелгән һүҙҙәр түгел былар.Балда 60-ҡа яҡын төрлө матдә бар.Балдың бөтә сорттарында ла глюкоза менән фруктоза күп.Ә улар-йөрәк мускулдарының нормаль эшләүе өсөн бик кәрәк матдәләр.
Бал витаминдарға ла бик бай.Уны һыуҙа иретеп,шуның менән ауыҙ сайҡайҙар.Һеҙөмтәлә күп кенә микробтар юҡҡа сыға.
Бал менән ашҡаҙан ауырыуҙарын да дауалайҙар.Йоҡлай алмағанда ла ,балдың файҙалы булыуы билдәле.( 102 һүҙ)(“Пионер”)

**9-сы синыф.**

Талҡаҫ күле.

Юлдаш менән Ҡыҙырас аяҡтарын күлдең йомшаҡ ҡомона батырып,оҙаҡ ултырҙылар.Талҡаҫ буйы һоҡланып бөткөһөҙ матур ине.Иртәнге һауала тауыш көслө яңғырай.Унда,Һаҡмар буйында,трактор геүләй.Һулда комбайн шаулай.Алыҫта йәштәрҙең йырлаған,көлгән тауыштары ишетелә.Оло юлдан иген,мәғдән тейәгән машиналар өҙлөкһөҙ үтә.Бейектә самолет күренә.Ул Өфөнән Баймаҡҡа почта килтерә.

Ә бында Талҡаҫ күле.Ул тып-тын ята.Күлдең уртаһында,күкһел томан эсендә,Уртаташ күренә.*(З.Биишеванан).*

*Өҫтәлмә эштәр.*

*1.Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе күсереп яҙығыҙ,улар нимәләрҙең атамаһы икәнен күрһәтегеҙ.*

*2.Һөйләмдең ниндәй киҫәге булып киләләр,һыҙығыҙ.*

Июнь

Июнь-йылдың иң матур айы.Болон ,туғайҙар гөрләп сәскә ата.Был айҙа Өфө ҡалаһына яҡын аҡландарҙа ҡырҡтан ашыу сәскә төрөн күрергә мөмкин.
Йылға,күлдәр өҫтөн ап-аҡ һәм һап-һары томбойоҡ сәскәләре ҡаплай.
Май,июнь-ҡоштарҙың бала сығарыу ваҡыты.Улар балаларына ашарға ташып бер була.Мәҫәлән,бәләкәй генә себен сәпсеге тәүлегенә 560 тапҡыр осоп,аҙыҡ килтерә.
Июндә күбәләктәр оса.Бал ҡорто күс айыра.
Июнь-тәүге еләктәр айы.Иң тәүҙә ҡайын еләге бешә.
22 июнь-йыл эсендә иң оҙон көн һәм иң ҡыҫҡа төн.Бер нисә көн шулай тигеҙ тора,шунан йәйге көн ҡыҫҡара башлай.(92һүҙ)(“Йәншишмә”гәзитенән).